Тема: Синонимдар.

Маҡсат: - синонимдар тураһында төшөнсә биреү,
- ил яҙмышы, ер яҙмышы, тәбиғәт яҙмышы өсөн һәр кемдә ыңғай сифат тәрбиәләү, тәбиғәттең, илдең сафлығын, кеше һаулығын һаҡларға ыңғай сифат тәрбиәләү,
- миниатюр инша яҙыу.

Йыһаз: дәреслек, карточкалар, З.Ураҡсиндың «Башҡорт теленең синонимдар һүҙлеге», һөйләмдәр яҙылған плакат, һүрәттәр.

Дәрес барышы:

I. Ойоштороу мәле.

II. Төп өлөш.

1.а) Таблицала бирелгән шиғыр буйынса эш.

Эй сибәр ҡыҙ, һылыу йондоҙ .
Көн дә килә күрәһе

- шиғырҙы тасуири уҡыу.
- ниндәй һүҙҙәрҙең мәғәнәләрендә уртаҡлыҡ, оҡшашлыҡ бар?
( һылыу, сибәр. Был һүҙҙәрҙе таҡтаға яҙып ҡуябыҙ.)

б) Дәреслектәге инеш күнегеүҙе башҡарыу.

в) Үрҙә башҡарылған эштәр ярҙамында уҡыусыларҙан һығымта сығартыу. Һығымтаны координатаға теркәү.

Бер-береһенә яҡын мәғәнәле һүҙҙәр

юл эҙ һуҡмаҡ

К-1____ ____ _____ _______ _________________

2. Таҡтаға яҙылған һөйләмдәрҙе анализлау.
- Ғаиләлә иң <u>өлкәне</u> Иҙрис.
- Башҡаларҙан <u>олораҡ</u> булғанға уға эштең иң ауыры эләгә.
- Шулай булмай ни, <u>ҙур</u> бит инде ул.

- Һөйләмдәрҙе уҡыу.
- синонимдарҙы табыу.
- һөйләмдәрҙе үҙгәртеп уҡыу.(мәҫәлән, ҙур һүҙе менән генә)
- Синонимдар ни өсөн кәрәк? Уларҙың маҡсаты ниндәй?

Һығымтаны координатаға теркәйбеҙ.

Бер үк һүҙ ҡабатламау фекерҙе аныҡ телмәрҙе матурлау

биреү
К-2______________________________________________________________

3. Төркөмдәр менән эшләү.
Синыф 4 төркөмгә бүленә. 183-сө күнегеү тексы буйынса эш.
1-се төркөм – исем һүҙ төркөмө буйынса,
2-се төркөм – сифат,
3-сө төркөм – ҡылым,
4-се төркөм – рәүеш.
- Үҙ аллы эштән һуң һәр төркөм үҙ эшен уҡып ишеттерә һәм таҡтаға сығып координатаға билдәләй.

Сифат
К-3______ ___________ _________ ___________________________
Матур сибәр зифа

Исем
К-4______ ___________ ____________ __________________________
Танау морон томшоҡ

Ҡылым
К-5_______ _______ _________ ______________________________
ҡырҡыу телеү киҫеү

Рәүеш
К-6______ _______ ____________ ___________________________
Тағы йәнә яңынан

4. Телмәр үҫтереү.
182- се күнегеү.
- тексты дөрөҫ тауыш менән уҡыу.
Әңгәмә.
- Текста нимә тураһында һүҙ бара?
- Кемдәр ул замандаштар?
-Тәбиғәтте һаҡлау тураһында нимә әйтелә?
- һүрәттәр менән эш.
- Һеҙ тәбиғәтте нисек һаҡлайһығыҙ?
- текстағы ҡара хәреф менән бирелгән һүҙәргә синонимдар табыу.
( Синонимдардар һүҙлеге менән таныштырыу.)

5. Синонимдар төркөмө менән мини инша яҙыу. ( төркөмдәр менән эш)

Мәҫәлән. Бөгөн уҡыусылар урманға ағас төптәрен утарға барҙылар. Заһир бөтә <u>көсөн</u> һалып эшләне. Бер аҙҙан уның <u>хәле</u> бөтә башланы, ләкин бирешергә уйы юҡ ине. Тик тора-бара бөтөнләй <u>ғәйрәте</u> ҡайтты.

-төркөмдәргә эш 180-се күнегеү буйынса бирелә.

6. Карточкалар менән эш.

а) синонимдарҙы табырға.

- Иҫһә лә ҡеүәтле елдәр,
  Бөгөлмәй ҡайын,
  Килһә лә ыжғырып дауыл
  Һығылмай ҡайын.
- Ниндәй фәҡир, ниндәй ярлы кеше,
  Йыр юғалһа күңел түрендә.

б) кәрәкмәгән һүҙҙе алып ташла.

- Һалҡын һәм һыуыҡ ҡыш етте.
- Поезд тиҙ һәм шәп йөрөй.
- Йәйге көндәр эҫе һәм ҡыҙыу була.

7. Йомғаҡлау.

Координатаны ҡабатлау.